**Йөкмәткеһе**

1. Аңлатма яҙыу …………………………………………………………………………………………

2. Уҡыу предметына дөйөм характеристика ………………………………………………………...

3. “Башҡорт теле” предметының уҡыу планындағы урыны ……………………………………...……

4. Уҡыу йылы аҙағына планлаштырылған һөҙөмтәләр ………………………………………………………

5. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе ……………………………………………………………

6. Уҡыу – уҡытыу методик ҡулланмалар исемлеге...........................................……………………………………

7. Календарь – тематик план ……………………………………………………………………….…….

8. Уҡыу йылы аҙағына 5-се класс уҡыусыһының әҙерлек кимәленә талаптар……………………………...………

9. Ҡушымта…………………………………………………………………………………………...

## 1.Аңлатма яҙыу

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең башҡорт балалары өсөн башҡорт теленән яҡынса эш программаһы дөйөм белем биреүҙең дәүләт стандартына нигеҙләнеп, заман талаптарына тура килтереп яңыртыу, уның сифатын һәм һөҙөмтәлеген күтәреү бурыстарын хәл итеү маҡсатында төҙөлдө һәм эш планын төҙөү өсөн нигеҙ булып тора.

**Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла:**

- «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» законы;25.10.1991й.№1807-1
- Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» законы;29.12.2012й.№273-ФЗ
- «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законы;15.02.1999й.№216
- Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» законы;5.01.2004й.№60
- Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы 31.12.2009й.№УП-730

Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа Оҙайлы дауалауға мохтаж балалар өсөн, дәүләт ҡаҙна дөйөм белем биреү учреждениеһының, Шафран шифахана мәктәп - интернаты уҡыу планына ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.

Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған “Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән программа”(Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I – XI кластары өсөн). Төҙөүселәре: Тикеев Д.С., Толомбаев Х.А. һ.б.– Ижевск: «КнигоГрад», 2008.

Дәреслек: Башҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-се синыф уҡыусылары өсөн дәреслек. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М., Абдулхаева Г.Н. – Өфө: Китап, 2010.

Эш программаһы 67 сәғәткә бүленгән (аҙнаға 2 сәғәт)

**Программа йөкмәткеһе 3 йүнәлештән тора:**

- телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу;
- телдең системаһын (фонетика, орфография, орфоэпия, грамматика, пунктуация) өйрәнеү;
- бәйләнешле текст менән эшләргә өйрәтеүҙе күҙ уңында тота. Шулай уҡ унда милли тәрбиә тураһында ла мәсьәлә күтәрелә.

**Программала ҡуйылған маҡсат һәм бурыстар:**

1. Уҡыусыларҙы башҡорт әҙәби телендә дөрөҫ һөйләшергә, өйҙә, йәмәғәт урындарында, хеҙмәт процесында башҡорт әҙәби телен практик файҙаланырға өйрәтеү.
2. Башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик нормалары буйынса белем һәм күнекмәләр биреү.
3. Башҡорт телендә нәшер ителә торған гәзит-журналдарҙы, әҙәби китаптарҙы үҙ аллы уҡып аңлау күнекмәләрен биреү.
4. Үҙ фекереңде билдәле кимәлдә бәйләнешле итеп һөйләй һәм яҙа алыу күнекмәләрен формалаштырыу.
5. Телде өйрәнеү барышында балаларҙы башҡорт халҡының фәһемле тарихы, бай мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, башҡорт йолалары, күренекле шәхестәре, тыуған илдең тәбиғәте һ.б. менән таныштырыу, уларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халҡына, уның теленә, үҙе йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.
6. Бөтә һаналғандарға таянып, рус һәм башҡорт телдәрен, әҙәбиәтен өйрәнеү нигеҙендә, балаларға туған телгә ихтирам тәрбиәләү, уларға илһөйәр һәм интернациональ тәрбиә биреү.

**Башҡорт телен өйрәнеүҙең шәхсән һөҙөмтәләренә түбәндәгеләр инә:**

- тел кешеләрҙең аралашыу сараһы икәнде аңлау, үҙләштереү;
- башҡорт телен милли мәҙәниәттең бер күренеше тип ҡабул итеү;
- дөрөҫ һөйләү теле һәм яҙма тел кешенең индивидуаль мәҙәнилеге күрһәткесе;
- үҙ телмәренә иғтибарлы булып үҙ-үҙен баһалау һәләтлелеге

**Башҡорт телен өйрәнеүҙең предмет- ара һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:**

- белем алыу (уҡыу-уҡытыу) бурыстарын хәл итеү өсөн төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәт табыу маҡсатында, телде ҡуллана белеү оҫталығы;
- аралашыуҙың маҡсаты, бурысы, сараһы, тел шарттарында ориентирлашыу;
- телмәрҙе һәм аралашыу ситуацияһын иҫәпкә алып, коммуникатив бурыстарҙы (диалог, монологик телмәр, яҙма текстар) уңышлы атҡарыу маҡсатында, адекват телмәр сараларын һайлап ала белеү;

- үҙ фекереңде һәм позицияңды мөмкин тиклем теүәл итеп аңлатырға ынтылыу;
- һораүҙар биреү оҫталығы

**Башҡорт телен өйрәнеүҙең предмет һөҙөмтәләренә түбәндәгеләр инә:**

- башҡорт әҙәби теле нормалары (орфоэпик, лексик, грамматик) һәм телмәр этикеты ҡағиҙәләре тураһында башланғыс төшөнсә алыу;
- орфографик ҡағиҙәләрҙе һәм тыныш билдәләрен (өйрәнелгән кимәлдә) ҡуйыу ҡағиҙәләрен белеү;
- өн, хәреф, һүҙ өлөшө, телмәр киҫәге, һөйләм киҫәге, ябай һөйләм кеүек тел берәмектәрен таба, сағыштыра, классификациялай ( бүлә), ҡылыҡһырлай (характеристика бирә) алыу оҫталығы;

үҙеңдең ғәмәлдәреңдә контролдә тотоу, әйткәндә һәм яҙғанды тикшерә.

***Яҙма эштәрҙең төрҙәре,күләме .***

| **Эш төрҙәре** | Күсереп яҙыу | Һораүҙарға яуаптар | Һүҙлек диктанты | диктант | изложение | инша |
|---|---|---|---|---|---|---|
| **һаны** | **1** | **1** | | **4** | **2** | **2** |
| **күләме** | | | **12-15 һүҙ** | **40-50 һүҙ** | **40-45 һүҙ** | **50-65 һүҙ** |

**2. Уҡыу предметына дөйөм характеристика**

*Коммуникатив компетенция* телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре, һөйләү һәм яҙма телмәр-төрҙәрен үҙләштереүҙе иҫәптә тота, тел материалын һәм күнекмәләрҙе кәрәкле ситуацияларҙа ҡуллана алыуҙы талап итә. Коммуникатив компетенция аралашыуҙың маҡсатын билдәләй, телмәр ситуацияһын баһалай белеүҙе, аралашыусының коммуникация ысулдарын һәм ниәттәрен иҫәпкә алыуҙы, адекват стратегик аралышыуҙы һайлауҙы һәм үҙ телмәреңде аңлы рәүештә үҙгәртеүгә әҙер булыуҙы күҙ уңында тота.

*Тел һәм лингвистик компетенция* йәмғиэт күренеше булараҡ, тел тураһында тейешле белемде үҙләштереү нигеҙендә уның төҙөлөшөн, үҫешен, хәрәкәттә булыуын формалаштырыуҙы аңлата; башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын үҙләштереү; һүҙлек запасын һәм уҡыусы телмәренең грамматик төҙөлөшөн байытыу; фән булараҡ лингвистика тураһында тейешле белем, уның төп бүлектәренә кәрәкле булған тел күренешен һәм фактарын анализлау һәм баһалау мөмкинлеген формалаштырыу; төрлө төрҙәге лингвистик һүҙлектәр менән ҡуллана белеү.

*Мәҙәни компетенция* туған телдең мәҙәниәтен сағылдырыусы форма булараҡ аңлайҙы күҙ алдында тота, тел һәм халыҡ тарихының бәйләнештә булыуын, башҡорт теленең милли- мәҙәни үҙенсәлеген, башҡорт телмәр этикет нотмаларын үҙләштереүҙе, халыҡ-ара аралашыу мәҙәниәтен үҙләштереү; милли-мәҙәни компонентлы һүҙҙәр мәғәнәһен аңлатыуҙы беледерә.

Башҡорт теле курсының коммуникатив-эшмәкәрлек йүнәлешен көсәйтеү; уны белем алыуҙа метапредмет һөҙөмтәләргә йүнәлтеү кешенең тышҡы мөхиткә тиҙ яраҡлашыу һәләтле һәм унда әүҙем эшмәкәрлекте дауам итеүгә һәләтле булараҡ, функциональ грамоталылыҡты формалаштырыуҙың мөһим шарттары булып тора.

Функциональ грамоталылыҡтың мөһим индикаторы – предмет-ара статус: *коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге* ( телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәре менән эш итеү, тыңдаштәре һәм оло кешеләр менән аралашыуҙы ҡороу; телдән һәм яҙма телмәрҙе адекват ҡабул итеү; ҡуйылған проблема буйынса үҙ ҡарашыңды теүәл, дөрөҫ, логик яҡтан төҙөк һәм тасуири әйтеп биреү, аралашыу процесында яҙма һәм һөйләү телмәре нормаларын һәм башҡорт телмәр этикетын һаҡлау); *танып белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге* (проблеманы асыҡлау, дөрөҫ аргументлай белеү, логик яҡтан төҙөк фекер йөрөтөү, иҫбатлау, табыу, раҫлаусы йә кире ҡағыусы тезис килтереү; библиографик эҙләнеүҙе

тормошҡа ашырыу, төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәтте алыу, төп һәм өҫтәмә мәғлүмәтте билдәләү, уҡыу маҡсатын асыҡлау, аралашыу маҡсатынан сығып ыҡыу төрөн һайлау; мәғлүмәти-компьютер сараларын ҡулланыу; мәғлүмәтте системаға килтереү һәм киренән эшкәртеү һәм төрлө ысулдар менән күрһәтеү һ.б.); *регулятив универсаль уҡыу хәрәкәте* (эшмәкәрлек маҡсатын ҡуя һәм аныҡ итеп әйтә белеү, әшмәкәрлекте эҙмә-эҙлекле планлаштыра һәм кәрәк саҡта үҙгәртә белеү; үҙ контроль, үҙ баһалау, үҙ коррекциялау һ.б. тормошҡа ашырыу.) Функциональ грамоталылыҡтың мөһим компоненты телмәр эшмәкәрлеге төрҙәренә нигеҙләнә һәм мәктәптә туған телде өйрәнеү аша уҡыусыларҙың фекерләү һәләтен маҡсатлы йүнәлештә үҫтереүҙе күҙ уңында тота.

Функциональ грамоталылыҡты формалаштырыу, уҡыусыларҙың телмәр эшмәкәрлеген камиллаштырыу башҡорт теленең төҙөлөшө һә аралашыуҙың төрлө шарттарында уны ҡулланыу үҙенсәлектәрен белеү нигеҙендә төҙөлә. Уҡыу процесы телде анализлау күнекмәләрен  формалаштырыуға ғына йүнәлдерелгән булырға тейеш түгел, ә шулай уҡ телмәр мәҙәниәтен тәрбиәләү, тормошта мөһим күнекмәләрҙе формалаштырыу, төрлө уҡыу төрҙәрен ҡулланыу, тексты мәғлүмәти эшкәртеү, мәғлүмәтте төрлө формала эҙләү, телмәр ситуацияһына, әҙәби тел нормаларына һәм аралашыуҙың этик нормаларына яраҡлы төрлө ысулдарын файҙаланыу. Шулай итеп, төп дөйөм белем биреү мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу баланың дөйөм мәҙәни кимәлен үҫтерергә, артабан уҡыуын төрло белем биреү учреждениеларында дауам итә алырлыҡ кимәлдә булырға тейеш.

### 3. “Башҡорт теле” предметының уҡыу планындағы урыны

Уҡыу планы буйынса Оҙайлы дауалауға мохтаж балалар өсөн, дәүләт ҡаҙна  дөйөм белем биреү учреждениеһының икенсе быуын Федераль дәүләт стандарты планына ярашлы 3 вариант нигеҙендә. Дөйөм белем биреүсе мәктәптә башҡорт телен өйрәнеүгә 5  класта 67 сәғәт, аҙнаһына 2 сәғәт бүленә.

## 4.Уҡыу йылы аҙағына планлаштырылған һөҙөмтәләр:

## I. Шәхси сифаттар:

1. Үҙ милләтен,Ватанын, тыуған яғын яратыу;
2. Этник һәм милли сағылышын таныу:
   •үҙаллылыҡҡа, белем алыуға етди һәм яуаплы ҡарау;
   •мәктәп һәм кабинет йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл ҡарау;
   •атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булырға;
3. ғаилә һәм йәмғиәт ҡиммәттәрен ихтирам итеү, үҙ аллы эшләү һәм үҙ эштәренә яуап бирергә әҙер булыу;
4. Ҡыҙыҡһыныусан, әүҙем булыу һәм донъяны танып белеүгә ынтылыу;
5. Динамик үҙгәреүсән һәм үҫтерешле донъяла үҫенеү социаль ролен аңлау;
6. әхлаҡ, социаль ғәҙеллек һәм ирек хаҡындағы ҡараштар нигеҙендә үҙ аллы үҫешкә һәләтле булыу;
7. һәр саҡ этик тойғолар, ихтирамлылыҡ һәм эмоциональ – әхлаҡ һәм икенсе кешеләрҙең тойғоларын уртаҡлаша алыу;

## II.Метапредмет һәләттәре:

1. Уҡыу күнекмәләре нигеҙҙәрен белеү, үҙенең эшмәкәрлеген ойошторорға һәләтле булыу;
2. Үҙенең уҡыу эшмәкәрлегенең нигеҙҙәрен проектлау, баһаларға һәләтле булыу, уңышҡа өлгәшеүҙең эффектив юлдарын билдәләй белеү;
3. Үҙенең йәш мөмкинлектәренән сығып компьютер грамоталылығына эйә булыу, кәрәкле мәғлүмәт йыйыу, анализлау, эшкәртеү маҡсатында Интернетҡа сыға белеү,тексты баҫыу, уны төҙәтә һәм техник эшкәртә белеү;

4. Аңлы уҡыу күнекмәләрен үҙләштереү, төрлө стиль һәм жанрҙағы текстарҙы үҙ аллы уҡый белеү, текстың төп фекерен билдәләү, йөкмәткеһен еткерә алыу, уның буйынса һорауҙарға яуап биреү;
5. Сағыштырыу, анализ, синтез, дөйөмләштереү кеүек логик эшмәкәрлеккә эйә булыу, оҡшаш сифаттары буйынса классификациялау, сәбәп-эҙемтә бәйләнештәрен һәм оҡшашлыҡты булдырыу;

## III. Предмет һәләттәре:

1. Башҡорт теле Башҡортостандың, рус теле Рәсәй Федерацияһының дәүләт һәм аралашыу теле булараҡ мәғәнәһен аңлау;
2. Телмәр этикетына, аралашыуҙа төрлө тасуири тел сараларына эйә булыу;
3. Уҡыуҙың төрлө төрҙәрен файҙаланыу: танышыу, өйрәнеү, һайлап, эҙләп, аңлы рәүештә ҡабул итеү һәм текстарҙың йөкмәткеһен аңлап, геройҙарҙың эшенә, ҡылығына әхлаҡи баһа биреү;
4. Уҡыу компонентына, үҫешкән телмәр оҫталығына эйә булыу, йәғни ҡысҡырып уҡыу һәм үҙ аллы уҡыу техникаһына анализдың элементар әҙәбиәт төшөнсәләр менән художестволы, фәнни- популяр һәм уҡыу текстарын үҙгәртеп ҡора белеү;
5. һөйләмгә тулы синтаксик анализ: интонация буйынса һөйләм төрөн билдәләү, баш һәм эйәрсән киҫәктәрен табыу, һөйләмде мәғәнәһе яғынан бәйле һүҙбәйләнештәргә тарҡата белеү;
6. Текст буйынса изложение яҙыу, инша ижад итеү, тирә-яҡтағы күренештәрҙе һүрәтләп, хәл-ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙ бәйән итеп, текст төҙөп яҙа белеү ;

## 5.Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

**Һаумы, мәктәп! Һаумы, уҡытыусым! (8 сәғәт)**

Был тема (1 сентябрь – Белем көнө.Мәктәп, уҡыу, белем алыу, тел өйрәнеү) башлыса “Көҙ” темаһы менән бергә үрелеп бара. Бер үк ваҡытта, уҡыусыларҙың йәйге каникулды нисек үткәреүе тураһында әңгәмә үткәреү, фекер алышыуҙар

ойошторола. Был темаларға ҡағылышлы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр иҫкә төшөрөлә, һүҙлек запасын байытыу йәһәтенән яңылары үҙләштерелә.Башҡорт теленең өн-хәрефтәре, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Исем. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше. Һөйләмдә һүҙ тәртибе. Сифат.

**Үҙем тураһында (8 сәғәт)**

Был теманы үҙләштереү барышында уҡыусы үҙе тураһында,үҙенең ғаилә ағзалары, яҡындары тураһында һөйләргә өйрәнергә тейеш. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Алмаш. Зат алмаштары. Зат алмаштарының килеш менән үҙгәреше. к-г,ҡ-ғ тартынҡыларының сиратлашыуы.

**Йыл миҙгелдәре (8 сәғәт)**

Йыл миҙгелдәре, һәр йыл миҙгеленә хас үҙенсәлектәр менән танышыу. Йыл миҙгелдәрен, һәр миҙгелгә ҡараған ай исемдәрен дөрөҫ әйтә һәм телмәрҙә ҡуллана белеү. Һорау алмаштары.Күрһәтеү алмаштары. Күрһәтеү алмаштарының килеш менән үҙгәреше. Билдәһеҙлек алмаштары. Билдәләү алмаштары.

**Башҡортостанды беләһеңме? (7 сәғәт)**

Уҡыусыларҙы үҙҙәре йәшәгән республиканың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән таныштырыу. Уҡыусы аңына үҙе йәшәгән ерҙең – Башҡортостандың тарихы, уның байлығы, күренекле шәхестәре һ.б. хаҡында бер бөтөн тыуҙырыу һәм ул турала һөйләй белеүҙәренә өлгәшеү. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Юҡлыҡ алмаштары.

**Кеше. Тән ағзалары.шәхси гигиена. (6 сәғәт)**

Был тема кешенең тән ағзалары, эске органдарының атамаларын белеү менән бергә шәхси гигиена, көн тәртибе, һаулығы менән берлектә алып барыла. Кешегә һау-сәләмәт булыу өсөн нимә эшләргә кәрәклеге тураһында әңгәмәләр үткәреү, әҫәрҙәр уҡыу. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. Ҡылым.

**Яңы йыл менән! Ҡыш. (7 сәғәт)**

Яңы йыл темаһы ҡыш темаһы менән берлектә алып барыла. Ҡыш миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү, Яңы йыл менән туғандарҙы, яҡын кешеләрҙе ҡотларға өйрәтеү, һәр байрамдың үҙенә генә хас күренештәре тураһында һөйләтеү. Ҡылымдың зат һәм һан менән үҙгәреше.

**Аҙыҡ-түлек.Кейем-һалым. Өй . Магазин. (6 сәғәт)**

Аҙыҡ-түлек, кейем-һалым атамаларын өйрәнеү, һатып алыу этикеты менән таныштырыу, һөйләшергә, аралашырға өйрәтеү. Синоним.

**8 март – Ҡатын-ҡыҙҙар көнө. (4 сәғәт)**

Әсәй тураһында шиғыр, хикәйәләр уҡыу. Әсәйҙең донъяла иң ҡаҙерле кеше икәнен, уны ихтирам итергә, яратырға, ҡаҙерләргә кәрәклекте аңлатыу. Был тема ғаилә темаһы менән берлектә бара, шуның өсөн алдағы кластарҙа үтелгән ғаилә темаһы ҡабатлана. Ҡотлау открыткалары яҙырға, ҡотлау һүҙҙәрен әйтә белергә өйрәтеү. Антоним.

**Яҙ етте. ( 6 сәғәт)**

Яҙ билдәләрен күрә һәм яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәрен әйтә белергә өйрәтеү. 1 май, 9 май байрамдары, дуҫлыҡ тураһында һөйләшеү. Омоним.

**Яҙғы эштәр.(5 сәғәт)**

Яҙғы эштәр, яҙғы баҡса эштәре,баҫыу эштәре тураһында һөйләшеү. Һан. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**Яҙғы байрамдар. (2 сәғәт)**

Башҡорт халҡының, Башҡортостанда йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың яҙғы тәбиғәт менән бәйле ғөрөф-ғәҙәттәре һәм матур йолалары тураһында һүҙ алып барыла. Уҡыусыларға уларҙың кеше тормошондағы әһәмиәте, мәғәнәләрен, уларҙы тергеҙеү кәрәклеген еткереү. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

## 6.Уҡыу йылы аҙағына 5- се класс уҡыусыһының әҙерлек кимәленә талаптар

- Өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең авторын, исемен белеү;
- Яҙыусы ижад иткән художестволы картиналарҙы уйлап күҙ алдына баҫтырыу;
- Эпик һәм лирик әҫәрҙе айыра белеү;
- Программала ятлау өсөн тәҡдим ителгән әҫәрҙәрҙең тексын ятлау, 8-10 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү.
- Художестволы, фәнни популяр һәм публицистик текстарҙы ҡысҡырып, етеҙ уҡыу;
- Художестволы әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу;
- Ҙур булмаған хикәйәләрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен һөйләп биреү.
- Йәмғиәт тормошонда телдең роле; туған телдең әһәмиәте;
- Фонетика, телмәр өндәре, ижек, баҫым, һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр;
- Графика, алфавит; хәрефтәрҙең өндәрҙе сағылдырыуы төшөнсәләре;

– Лексика; һүҙҙең лексик мәғәнәһе; һүҙҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе; синоним, антоним, омоним;
– Исемдәрҙең һан, килеш менән үҙгәреше, күплек һәм килеш ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы, яңғыҙлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышы;
– Ҡылымдарҙың заман, һан, зат менән үҙгәреше;
– Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре, уларҙың яҙылышы, һөйләмдәге роле.
– Ижади диктанттар, изложениелар һәм иншалар яҙыу.

## 8. Уҡыу - уҡытыу методик ҡулланмалар исемлеге


1. Усманова М. Г. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа һәм схемаларҙа.
2. Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М. С., Сиразетдинов З. Ә. Башҡортса өйрәнәйек. Урыҫ мәктәптәренең 1-4 – се синыфтары өсөн башҡорт теленән электрон дәреслек. – Өфө: Мәғариф министрлығы, 2003.
3. Аслаев Т. Х., Атнағолова С.В. Телмәр үҫтереү буйынса сюжетлы картиналар.-Өфө:Китап, 1996.
4. Таблицалар.
5. Башҡорт әҙәбиәте буйынса аудио-видеоәсбап.- Өфө: Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы. 2005.
6. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа. Фонетика. Морфология. - Башҡортостандың бәләкәй даһийы. Өфө : «Эдвис» уҡытыу – методика үҙәге, 2008.
7. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге,башланғыс синыф уҡыусылары өсөн,З.Ғ.Ураҡсин, З.Ә.Сиразитдинов,Н.Ф.Суфьянова, Өфө: Китап, 2005
8. Башҡорт теленән диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Өфө: Китап, 2009.
9. Ғафаров Б.Б.Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы. – Өфө : Китап, 2008. – 352 бит.
10. 5-9 кластарҙа башҡорт телен уҡытыу методикаһы /Аҙнағолов Р.Ғ., Тикеев Д.С. һ.б. – Өфө : Китап, 1996. – 320 бит.
11. Раҡаева Ә.С., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теленән контроль һорауҙар, тестар ҡулланмаһы. – Өфө: Педкнига, 2008. – 96 бит.

**Материаль-техник ҡулланмалар**

- телевизор;
- видеомагнитофон;
- DVD плеер;
- компьютер;
- мультимедиапроектор.

**Ҡушымта**

**V-IX класс уҡыусыларының башҡорт теле буйынса белемдәрен, белеүҙәрен (умение) һәм күнекмәләрен баһалау нормалары.**

**Телдән биргән яуаптарҙы билдәләү нормалары.**

Үтелгәндәрҙе ҡабатлау, уҡыусыларҙан яуап алыу, уларҙың башҡорт теле буйынса белемдәрен, белеүҙәрен һәм күнекмәләрен тикшереү, иҫәпкә алыу, шуның менән бергә, алған белемдәргә таянып, тел берәмектәренә, күренештәренә аңлатма бирергә өйрәтеү алымдарының береһе иҫәпләнә.

Уҡыусының яуабын баһалағанда, *түбәндәге критерийҙар* менән эш итергә тейеш:

1) Яуаптың тулы һәм дөрөҫ булыуы;
2) Үтелгәнде аңлы үҙләштереү, аңлау кимәле;
3) Яуаптың телмәр төҙөлөшө, әҙәби тел нормаларына ярашлы булыуы.

Уҡыусының  телдән биргән яуабы үтелгән материалдың уҡытыусы тәҡдим иткән өлөшөнә логик эҙмә-эҙлекле аңлатманы эсенә алған бәйләнешле телмәр булырға, яуап биреүсе баланың өйрәнелгән ҡағиҙәләргә, билдәләмәләргә таянып эш итә белеүен күрһәтергә тейеш.

Әгәр уҡыусы:

1) тәҡдим ителгән теманы тулы аңлатһа, тел төшөнсәләренә дөрөҫ билдәләмә бирһә;
2) үтелгән материалды тулы аңлауын,белемдәрен практик ҡуллана белеүен күрһәтһә;
3) материалды эҙмә-эҙлекле һәм әҙәби тел нормаларына ярашлы аңлатһа, уның яуабы «**5**» билдәһе менән баһалана.

Әгәр уҡыусы «5» билдәһен ҡуйыу талаптарына ярашлы яуап бирһә, ләкин һирәк яһала торған хаталар ебәреп тә уҡытыусы иҫкәртеүенән һуң уларҙы төҙәтеп барһа,теләндә,телмәр төҙөлөшөндә һирәк-һаяҡ яңылышлыҡтар китһә, уның яуабы «**4**» билдәһе менән баһалана.

Әгәр уҡыусы тәҡдим ителгән темаға ҡараған төп төшөнсәләрҙе аңлауын һәм белеүен күрһәтһә, ләкин

1) материалды тулы аңлата алмаһа,төшөнсәләрҙең һәм ҡағиҙәләрҙең билдәләмәһендә хаталар ебәрһә;
2) әйткән фекерҙәрен тулы һәм иҫбатлауҙы нигеҙләй белмәһә, үҙ миҫалдарын килтерә алмаһа;
3) Яуабында эҙмә-эҙлелек һаҡланмаһа, телмәр төҙөлөшөндә хаталар булһа, уның яуабы «**3**» билдәһе менән баһалана.

Әгәр уҡыусы һоралған материалдың күберәк өлөшөн белмәүен, билдәләмәләрҙе һәм ҡағиҙәләрҙе әйткәндә уларҙың төп фекерен боҙоуға килтерә торған хаталар ебәрһә, материалды икеләнеүҙәр менән системаһыҙ аңлатһа, уның яуабы «**2**» билдәһе менән баһалана

**Диктанттарҙы баһалау**

Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй.

Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим иттеләр.

Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш.

**Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай**:

1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;

2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;

3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;

4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).*

Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙың икеһе берәүгә иҫәпләнә.

**Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә**:

1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;

2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;

3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;

4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

**Диктант бер генә билдә менән баһалана**.

**«5» билдәһе** — тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,

**«4» билдәһе** 4 орфографик, 3 пунктуацион, йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

**«3» билдәһе** 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

**«2» билдәһе** 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.

**Грамматик биремдәрҙе баһалағанда** түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:

**«5» билдәһе** бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,

**«4» билдәһе** эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,

**«3» билдәһе** яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә,

**«2» билдәһе** бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

**Иншаларҙы һәм изложениеларҙы баһалау**

Инша һәм изложениелар яҙҙырыу аша уҡыусыларҙың:

1) теманы аса белеүе, тел сараларын инша йәки изложениеның темаһына һәм уларҙағы төп фекерҙе аңлатыу бурыстарына ярашлы һайлай белеүе,
2) яҙғанда грамматик нормаларға һәм дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренә таянып эш итеүе тикшерелә. Шуның өсөн иншаға ла, изложениеға ла һәр ваҡыт ике билдә ҡуйыла.Беренсе билдә менән - уларҙың йөкмәткеһе һәм телмәр төҙөлөшө, икенсе билдә менән грамоталылыҡ кимәле баһалана.

| Баһаларҙың төп критерийҙары | | |
|---|---|---|
| Йөкмәтке һәм телмәр төҙөлөшө | Грамоталылыҡ | Баһалау |
| 1.Яҙма эштең  йөкмәткеһе тулыһынса темаға тура килһә,<br>2. Фактик хата булмаһа,<br>3.Йөкмәтке эҙмә-эҙлекле бирелһә (план буйынса йәки планһыҙ),<br>4. Эш лексик яҡтан бай булыуы менән айырылып торһа,<br>5.Эш темаға һәм төп фекерҙе аңлатыу маҡсатына ярашлы стилдә яҙылһа, телмәре тасуири булһа,<br><u>Иҫкәрмә.</u> Бер генә телмәр хатаһы һәм бер генә йөкмәтке хатаһы булған яҙма эшкә «5» билдәһе | Яҙма эштә 1 орфографик, йәки 1 пунктуацион,йәки 1 грамматик хата (тимәк,бөтәһе 1 генә хата) булһа, | **«5»** билдәһе ҡуйыла |

| | | |
|---|---|---|
| ҡуйырға мөмкин. | | |
| 1. Эштең йөкмәткеһе, нигеҙҙә,темаға тура килһә (теманан ситкә китеү бик аҙ булһа),<br>2. Йөкмәтке, нигеҙҙә,дөрөҫ бирелһә, әммә эштә бик аҙ  булһа ла, фактик хаталар осраһа,<br>3. Төп фекерҙе аңлатыу эҙмә-эҙлеклегендә тупаҫ булмаған етешһеҙлектәр генә булһа,<br>4. Яҙма эш, нигеҙҙә, синоним һүҙҙәргә һәм синонимик грамматик формаларға бай булһа,<br>5. Эш бер төрлө стилдә яҙылыуы һәм тасуири булыу менән айырылып торһа,<br>Иҫкәрмә.  Яҙма эштең телмәр хаталары өстән дә, йөкмәткеһендәге хаталар икенән дә артмаһа,уға «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин. | Яҙма эштә 2 орфографик һәм 2 пунктуацион хата, йәки 1 орфографик һәм 3 пунктуацион хата булһа, йәки бер орфографик хатаһы ла булмайынса, пунктуацион хаталары 4-тән, һәм грамматик хаталары 2-нән артмаһа, | **«4»** билдәһе ҡуйыла |

| | | |
|---|---|---|
| 1. Яҙма эштә теманан ситкә китеүгә ҡараған етди хаталар булһа,<br>2. Төп фекер дөрөҫ аңлатылһа, әммә эштә фактик хаталар ебәрелгән булһа,<br>3. Айырым өлөштәрендә төп фекерҙе аңлатыу эҙмә-эҙлеклеге боҙолһа,<br>4. Яҙма эш бер төрлөрәк типтағы синтаксик конструкцияларҙан торҙа, һүҙлеге ярлы, һүҙҙәрҙе ҡулланыуҙа хаталар булһа,<br>5. Эш тема һәм уны аңлатыу (асыу) талап иткән бер төрлө стилдә яҙылмаһа,<br>Иҫкәрмә. Яҙма эштәге телмәр хаталары 5-тән, йөкмәткелеге хаталар 4-тән артмаған хәлдә лә, эшкә «**3**» билдәһе ҡуйырға мөмкин. | Яҙма эштә **4** орфографик һәм **4** пунктуацион хата, йәки 3 орфографик һәм 5 пунктуацион хата, йәки 7 пунктуацион хата һәм орфографик хатаһыҙ булһа, шулар өҫтөнә 4 грамматик хата ебәрелһә, | «**3**» билдәһе ҡуйыла |
| 1. Яҙма эш темаға тура килмәһә, | Орфографик хаталары 7-нән, | «**2**» билдәһе ҡуйыла |

| | | |
|---|---|---|
| 2. Фактик хаталар күп булһа,<br>3. Эштең бөтә өлөштәрендә фекер аңлатыу эҙмә-эҙлеклеге боҙолһа, текст өлөштәре араһында бәйләнеш булмаһа, планға ярашһыҙ булһа,<br>4. Һүҙлеге ғәҙәттән тыш ярлы булһа, эш үҙ-ара бәйләнеше булмаған бер төрлө конструкциялы ҡыҫка һөйләмдәрҙән торһа, һүҙҙәр ҡулланышында ла хаталар осраһа,<br>5. Эштә стилдең бер төрлөлөгөнә ирешелмәгән булһа,<br>Иҫкәрмә. Яҙма эштәге телмәр хаталары 7-нән, йөкмәткеһендәге хаталар һаны 6-нан артмаған хәлдә лә, уға «2» билдәһе ҡуйырға мөмкин. | пунктуацион хаталары 7-нән ,грамматик хаталар ҙа 7-нән артһа, | |

| **Билдәләр** | **Баһалауҙың төп критерийҙары** | |
|---|---|---|
| | **Йөкмәтке һәм телмәр** | **Грамоталылыҡ** |
| **«5»** | 1.Эштең йөкмәткеһе темаға тулыһынса тап килә.<br><br>2.Фактик хаталар юҡ.<br><br>3.Йөкмәтке эҙмә-эҙлекле асыла.<br><br>4.Эштең һүҙлеге бай.<br><br>5.Стиль һәм мәғәнәүи яҡтан текст камил. Эштә йөкмәтке яғынан-5, телмәр яғынан 5 кәмселек булырға мөмкин. | 3 орфографик, 3 пунктуацион йә 4 грамматик хата булыуы мөмкин. |
| **“4”** | 1.Эштең йөкмәткеһе нигеҙҙә темаға тура килә (бер ни тиклем тайпылыштар бар).<br><br>2.Йөкмәтке дөрөҫ,ләкин ҡайһы бер фактик, һөйләм төҙөлөшөндә хаталар бар.<br><br>3.Фекер ебендә бер ни тиклем эҙмә-эҙлелек боҙолған. | 7 орфографик, 6 пунктуацион йәки 2 орфографик,<br><br>13 пунктуацион, |

| | | |
|---|---|---|
| | 4.Ҡайһы бер осраҡта һүҙҙәрҙең ҡулланылышында хата китеүе мөмкин.<br><br>5.Эштең стиле ярайһы уҡ төҙөк һәм мәғәнәле.Дөйөм алғанда,эштең йөкмәткеһендә 8, телмәрендә 8 кәмселек булыуы мөмкин. | 5 грамматик хата |
| **“3”** | 1.Эш теманан байтаҡ ҡына ситкә тайпылған.<br><br>2.Эштең йөкмәткеһе нигеҙҙә дөрөҫ, ләкин фактик, һөйләм төҙөлөшөндә хаталар байтаҡ.<br><br>3.Эҙмә-эҙлелек тулыһынса һаҡланмай, һүҙҙәрҙең ҡулланылышында хаталар бар.<br><br>4.Эштә йөкмәтке яғынан -15, телмәре яғынан15 хата булыуы мөмкин. | 10 орфографик, 13 пунктуацион,<br><br>8 грамматик хата |
| **“2”** | 1.Эш теманы асмай.<br><br>2.Бик күп фактик, һүҙҙәр ҡулланылышында хаталар ебәрелгән.<br><br>3.Эштең бөтә өлөштәрендә лә фекерҙең эҙмә-эҙлелеге боҙолған, һөйләмдәр урынлы | 12-15 орфографик, 1 0 пунктуацион, 12 грамматик хата . |

| | | |
|---|---|---|
| | ҡулланылмаған, бәйләнеш юҡ.<br>4.Эштең йөкмәткеһендә -20 ,телмәрендә -20-нән күберәк хата ебәрелгән. | |

**Әҙәбиәт буйынса уҡыусыларҙың белемен баһалау**

Әҙәбиәт буйынса ла уҡыусы белемен баһалауҙың төрлө юлдары һәм үҙенсәлектәре бар. Исеменән үк күренеүенсә, әҙәбиәт дәресе уҡыусыларҙы әҙәпкә,тәртипкә, кешелеклелеккә өйрәтеү менән бергә матурҙы йәмһеҙҙән, яҡшыны насарҙан айырырға ла күнекмә бирә. Тимәк, һәр әҙәбиәт дәресе уҡыусыға тәьҫир итерлек, һоҡланып ултырырлыҡ та булырға тейеш. Шуның менән бергә һәр әҙәбиәт дәресендә тиерлек уҡыусы белеме лә баһаланырға, сиреккә, йыллыҡҡа билдәләр ҡуйылырға бурыслы. Хәҙер әҙәбиәт дәрестәрендә баһалар ҡуйылыу мөмкинлектәрен, юлдарын ҡарап үтәйек.

Баланы тейешле кимәлдә уҡырға өйрәтеүҙә унең әҙәбиәттән дәрестә белем алыуы менән бергә үҙаллы уҡый белеүе лә мөһим роль уйнай.Ошо маҡсаттан сығып .һәр синыфта синыфтан тыш уҡыу дәресе үткәрелә.Бөтә балаларға ла уҡыған китаптары һанына һәм уларҙың йөкмәткеһен һөйләй белеүенә ҡарап баһа ҡуйыла.

**«5»** бөтә күрһәтелгән китаптарҙың йөкмәткеләрен һөйләгән өсөн ҡуйыла.

**“4”** күрһәтелгән китаптарҙың береһен уҡымаған,әммә өҫтәлмә рәүештә үҙе уҡыған бер нисә китап йөкмәткеһен һөйләй ала.

**“3”** Бала күрһәтелгән китаптарҙың яртыһын ғына уҡыған,шулай уҡ бер-ике китап менән генә таныш,уҡырға бирелгән әҫәрҙәрҙең дә йөкмәткеһен һорауҙар ярҙамында ғына күҙ алдына килтерә ала.

**“2”** күрһәтелгән китаптарҙың береһен дә уҡымыған,әҙәби китаптар менән бөтөнләй ҡыҙыҡһынмай.

**Тасуири уҡыу һәм ятлауҙар өсөн.**

Программа буйынса бөтә кластарҙа ла һәр сиреккә уртаса икешәр шиғыр йәки сәсмә әҫәр өҙөгө ятлатылырға тейеш.

Ятланасаҡ  әҫәрҙе баһалау өсөн түбәндәге баһалар ҡуйыла.

**«5»** - бер ниндәй тотҡарлыҡһыҙ тасуири итеп ятлай,паузалар теүәл талаптарға тура килә.

**“4”-** Әҫәр тотҡарлыҡһыҙ һөйләнә,әммә тасуирилыҡ етешмәй.

**“3”-** Тасуири итеп һөйләп тә,уҡыусы  дүрт-биш тапҡыр тотҡарлана,йәки яңылыша.

Ике шиғыр йәки өҙөк ятланмаһа,сиреккә,йыллыҡ баһа “3”-тән артыҡ ҡуйылмай

**Уҡыу тиҙлеген тикшереү**

Башланғыс кластарҙан алып, һәр бала билдәле бер кимәлдә, тиҙлектә шыма итеп уҡый белергә лә бурыслы. Ғөмүмән, етеҙ, дөрөҫ, тасуири уҡыу, уҡырға өйрәтеү әҙәбиәт дәрестәренең тәүге мөһим талаптарының береһе. Уны, йәғни   уҡыу тиҙлеген, 1 бала минутына күпме һүҙ укыуына ҡарап билдәләйҙәр. Һәр сирек һайын бер тапҡыр уҡыу тиҙлеге тикшерелә. Баһалар класс журналына ҡуйыла. Түбәндә башланғыс кластарҙан алып, уҡыусы минутына күпме һүҙ уҡырға тейеш булған һандар килтерелә. Уларға ҡарап, уҡыу тиҙлегенә ниндәй талаптар ҡуйылғанын билдәләргә мөмкин.

## Баһалар

| | «5» | «4» | «3» | «2» |
|---|---|---|---|---|
| I | 30 | 25 | 15 | 15-тән кәмерәк |
| II | 55 | 45 | 30 | 30-ҙан кәмерәк |
| III | 65 | 55 | 40 | 40-тан кәмерәк |
| IV | 80 | 75 | 55 | 55-тән кәмерәк |
| V | 100 | 90 | 80 | 80-дән кәмерәк |
| VI | 110 | 100 | 90 | 90-дан кәмерәк |
| VII | 120 | 110 | 100 | 100-ҙән кәмерәк |
| VIII | 130 | 120 | 110 | 110-дан кәмерәк |
| IX | 140 | 130 | 120 | 120-нән кәмерәк |

## Контроль диктанттар өсөн текстар.

Көҙгө урман.

Көҙгө урманда йөрөргә яратам. Уның иң матур сағы сентябрь бөткәндә булалыр.Зәңгәр күккә, йылы көнгә, урмандың төрлө биҙәктәренә һоҡланып туя алмайһың. Тәрән тынлыҡ. Әкрен генә йылы йел иҫә. Ағастарҙан һап-һары япраҡтарҙың ҡойолғаны ишетелеп ҡуя. Аяҡтарыңды ергә түшәлгән алтын япраҡ иркәләй. (43 һүҙ.) (Д.Исламовтан.)

Ҡыш яҡынлаша.

Көндәр һалҡынайҙы. Күк йөҙөн һоро болоттар ҡапланы. Ҡар ҡатыш һалҡын ямғыр яуа башланы. Һыуыҡтан бөжәктәр ҙә,ҡоштар ҙа ҡурҡа. Күбәләктәр ағас ярыҡтарына, ҡайһы бер бөжәктәр ҡойолған япраҡтар аҫтына йәшеренде. Ҡоштар йылы яҡҡа осоп киттеләр. Күп йәнлектәр ҡышҡа йөндәрен алмаштыра. Көҙ аҙағында балыҡтар йылға һәм күлдәрҙең төбөнә төшә. (49 һүҙ.)

Көләс булһын әсәйҙәр!

Әсәй! Ниндәй изге һүҙ. Был һүҙҙе ишеткәс тә, һәр кем үҙ әсәһен күҙ алдына килтерә. Беҙҙе кем ҡарай? Кем беҙҙең өсөн ҡайғыра һәм шатлана? Кем иркәләп һөйә? Әлбиттә, әсәй. Һәр кемгә үҙенең әсәһе матур ҙа, аҡыллы ла, эшсән дә, сабыр ҙа. Гел шат, көләс, тыныс булһын улар.  (50 һүҙ.) ( “Йәншишмә” газетаһынан.)

Батырҙар нидәй була?

Иртән иртүк Азат, Урал ҡустыһын эйәртеп, һабантуй буласаҡ яланға ашыҡты.

- Әйҙә, көрәшселәр янына барайык. Күрше Айрат ағай быйыл да батыр исеме алырмы икән? – тине ул.

Малайҙарҙың теләге ҡабул булды. Бик күп баһадирҙар көрәшкәндән һуң, майҙан уртаһында Айрат ағалары ғына ҡалды. Ул еңеүсе булды. Уға ҙур бүләк бирҙеләр. (50 һүҙ.) (С. Кәрим.)

**Изложение өсөн текстар.**

Юлбарыҫ менән төлкө.

Бер ваҡыт юлбарыҫ урман төпкөлөгөндәге шырлыҡҡа барып ингән, ти. Ҡараһа, ҡаршыһына юлбарыҫ килә икән. Төлкө ҡурҡыуынан ҡаса башлай. Юлбарыҫ уның артынан баҫтыра. Бына-бына тота яҙып, етеп килә, ти. Уларҙың юлын тәрән йырын бүлә. Төлкө туҡтай ҙа сеңләп илай башлай. Юлбарыҫ аптырап ҡала.

- Ни эшләп илайһың, төлкө?

-Эй, һеҙҙе күрҙем дә атайығыҙҙы иҫкә төшөрҙөм. Ул бик йылғыр ине. Ҙур-ҙур йырындарҙы һикереп сыға ине. Уф, башҡа бер ваҡытта ла ундай йылғырлыҡҡа һоҡлана алмам инде!..

Донъяһын онота юлбарыҫ: төлкө алдында үҙенең йылғыр булыуын күрһәтеп, шул тиклем маҡтанғыһы килә. Йырын аша һикерә, ләкин икенсе яҡҡа етә алмай, аҫҡа ҡолап төшә.

-Шулай булырын белдем дә!.. Атайығыҙға етергә һеҙҙең хәлегеҙҙән киләме һуң?.. – тигән дә хәйләкәр төлкө үҙ юлы менән китеп барған, ти.

Мерген.

Это было в Казахстане, в охотничьем поселке. Взяв из логова маленького слепого волчонка, Зайцев воспитал его. Волк полюбил человека. Прошло несколько лет. Началась война. Хозяин уехал на фронт. Мерген часто уходил искать его и пропадал где-то по неделе, по две. Возвращался и скоро уходил опять. Жена охотника уехала на другое место и отдала Мергена знакомым охотникам. Он убежал от них и поселился в камышах возле поселка. Водил дружбу с собаками местных охотников и часто охотился вместе с ними. Иногда возле бывшего дома Зайцевых жители по утрам видели большие следы. Все знали, что это приходил Мерген. Он все ещё ждал своего хозяина. Однажды, в конце зимы, у стога сена рядом домом Зайцева нашли Мергена мертвым. Умирающий волк последний раз пришел к своему хозяину. (По И.Ф.Заянчковскому.)

Күсереп яҙыу.

Ғинуар.

Ғинуарҙа яңы йыл башлана. Ғинуар – беҙҙең Башҡортостанда иң һыуыҡ ай. Ыжғыр буранлы көндәр күп була. Әсе ел һыҙғыра, төндәрен ул олой, ҡоторона.

Селдәр, ҡорҙар, һуйырҙар ҡалын ҡар аҫтына күмелгән. Улар сатнама һыуыҡтарҙың уҙғанын көтә. Тик һайыҫҡандар, турғайҙар ғына көслө һыуыҡтарҙа ла соҡсона. Улар йәшәгән урындарҙан аҙыҡ эҙләй. Ябалаҡ үткер күҙҙәре менән ҡар өҫтөн күҙәтә. Ҡар аҫтындағы өңөнән сыҫҡан сыҡҡанды һағалай. (Е.Кучеров буйынса)

# Тестар

***Тест№1***

1.Беҙ уҡыған әкиәт нисек атала?
*а)”Айыу менән ҡуян”*
*б)”Арыҫлан менән ҡуян”*
*в)”Арыҫлан менән тейен”*
2.”Беҙҙең әсәй”шиғырының авторы кем?
*а)Ф.Рәхимғолова*
*б)Р.Исҡужина*
*в)Ф.Ғөбәйҙуллина*
3.М.Ғафури яҙған хикәйәнең исеме:
*а)”Яңы фатир”*
*б)”Артурҙың бер көнө”*
*в)”Ҡыр ҡаҙы”*
4.Артур йоҡонан нисәлә тора?
*а)һигеҙҙә*
*б)етелә*
*в)һигеҙенсе яртыла*
5.М.Ғафуриҙың хикәйәһе нимәгә өйрәтә?
*а)хеҙмәтте ,эште яратырға*
*б)бөтәһенә лә ярҙам итергә*
*в)тәртипле булырға*
6.”Минең ҡустыларым”шиғырында
 ҙур малайҙың исеме кем?
*а)Айнур  б)Ғәлинур в)Айрат*

**Тест№2**

1.Ниндәй башҡорт халыҡ йыры менән таныштығыҙ?
*а.”Азамат”    б.”Урал”    в.”Сәлимәкәй”*
2. Яңғыҙлыҡ исемдәр нисек яҙыла?
*а.Ҙур хәреф менән       б.Бәләкәй хәреф менән.*

3. Башҡортостанда нисә район бар?
*а.50 б.52 в.54*
4.Нисә ҡала бар?
*а. 20 б.21 в.22*
5. Башҡортостан ҡасан үҙ аллы дәүләт тип иғлан ителде?
*а.1980 б.1990 в.1992*
6.Башҡортостан флагының төҫтәре нисек урынлашҡан?
*а.аҡ,күк,йәшел б.йәшел,күк,аҡ в. күк, аҡ ,йәшел*
7.Башҡортостандағы иң ҙур тау:
*а.Ирәмәл б.Янғантау в.Ямантау*
8. С.Юлаевҡа һәйкәл ҡасан ҡуйыла?
*а.1947 йыл б.1957йыл в.1967йыл*
9.Башҡортостан гербының тыуған көнө.
*а.25 февраль б.12 октябрь в.18 сентябрь*
10.Башҡортостан гимнының музыкаһын кем яҙған?
*а.Ф.Ислахов б.Ф.Иҙрисов в.О.Асабина г.Р.Бикбаев,Р.Шәкүр*
11.Гимндың һүҙҙәрен кем яҙған?
*а.Ф.Ислахов б.Ф.Иҙрисов в.О.Асабина г.Р.Бикбаев,Р.Шәкүр*
12.Башҡортостан гербының авторы.
*а.Ф.Ислахов б.Ф.Иҙрисов в.О.Асабина г.Р.Бикбаев,Р.Шәкүр*

**Тест№3**

1.“Әсәйем”шиғырының авторы кем?
*а.Ф.Мөхәмәтйәнов б.З.Әхмәтйәнова в.Т.Ғәниева*

2. <u>*Шатлыҡ*</u> һүҙенең антонимы:

*а.элек б. ҡайғы в.алыҫ*

3. “Көн йөрөй,төн йөрөй,бер атлам ер китмәй”:

*а.һыуыҡ б.сәғәт в.борсаҡ*

4. <u>*Әсәкәйем , мин һине яратам!*</u> Интонацияһы яғынан был ниндәй һөйләм?

*а.хәбәр б.һорау в.өндәү*

5.<u>*Мысль*</u> һүҙенең тәржемәһе :

*а.дөйөм б.фекер в.дуҫлыҡ*

6. <u>*Һөйөклө*</u> һүҙенә синоним :

*а. маҡтаулы б.һәйбәт в.ҡәҙерле*

7.<u>*Йыуҙың*</u> һүҙе нисәнсе затта тора?

*а. I зат б.II зат в.III зат* .

8.Башҡортостандың иң ҙур йылғаһы.

*а.Ағиҙел б.Кариҙел в.Яйыҡ*

**Тест№4**

1.”З.Исмәғилевтың тыуған яғы.Сермән”картинаһының авторы:

*а. Р.Нурмөхәмәтов б. В.Меос в.Ә.Лотфуллин*

2. <u>*Ул,һеҙ, улар*</u> ниндәй һүҙҙәр:

*а. сифат б.ҡылым в.алмаш*

3.<u>*Шыйыҡ-ҡуйы*</u> ниндәй һүҙҙәр:

*а. синоним         б. антоним           в.омоним*

4. Мәғәнәләре бер үк булған һүҙҙәр:

а. синоним         б. антоним                 в.омоним

5. Ҡайһы юлда омоним һүҙҙәр яҙылған:

*а. алма-алма            б. бейек---тәпәш            в.һылыу-гүзәл*

6. Ниндәй һүҙ төркөмө ҡылым тип атала?

*а. Предметты белдереүсе һүҙҙәр       б. Предметтың билдәһен  белдереүсе һүҙҙәр   в.Предметтың эш-хәрәкәтен белдереүсе һүҙҙәр*

7.Сифаттың һорауын билдәлә:

*а. кем?нимә?      б.  ниндәй?                в.ни эшләй?*

8.Предметтың иҫәбен белдергән һүҙҙәр:

*а. алмаш      б. исем              в.һан*